# Сая шәхестәр сафында

Кеше ғүмере – аkkан hыу.Шул ағышта hин үҙ булмышынды, асылынды күрhәтә алдыңмы, халkым тип яндыңмы, хеҙмәтеңә hалған көс – ғәйрәтендән, аkыл-зиhенендән сатkылар тамдымы, атkарған эштәрендән күңелең kандымы? Ҡылған изгелектәрең тормош ыҙанынды биҙәйме? Бына ошо hорауҙар кеше ғүмеренә баhа биреүсе төп алымдарҙың береhелер, ти әҙип Р.Аҙнағолов. Миңә kалhа, был hүҙҙәр яҙыусы hәм шағирҙарға kарата әйтелгән кеүек. Бөгөнгө материаль байлыkkа ынтылыу заманында халkыбыҙҙың рухи байлығын арттырыу өсөн фиҙаkәр хеҙмәт күрhәткән яҙыусыларыбыҙ тик hоkланыу, ғорурланыу хистәре уята. Ә халыk аңы, халыk рухиәте яҙыусы ижадынан, эшмәкәрлегенән барлыkkа килә, йәшәй, үҫә, мираҫ kалдыра.

Туймазы ере – таланттарға бай яk. Был хәkиkәтте беҙ башkорт әҙәбиәтен өйрәнеү мәлендә тағы ла нығыраk төшөндөk. Бөгөнгө көндә тыуған әҙәбиәтебеҙ алға бара икән, яңынан-яңы бейеклектәрҙе яулай икән, бында Туймазы әҙиптәренең дә өлөшө ҙур. Ә.Мирзаhитов, Н.Ҡотдосов, М.Сиражи, Т.Арыҫлан, С.Сафуанов кеүек яҙыусыларыбыҙ, бер яkтан, башkорт әҙәбиәте үҫеүенә үҙ өлөшөн индерhәләр, икенсе яkтан, Туймазынан сыkkан тигән исемдәре менән беҙҙең яkтың абруйын тағын да нығыраk арттыралар.

Билдәле, hәр яҙыусы үҙенсәнлекле, kабатланмаҫ шәхес. Шағирҙарҙы алайыk.Тимер Арыҫлан исеме күптәребеҙгә билдәле. Ул Кәкребаш ауылында тыуып үҫә, Бөйөк Ватан hуғышында kатнаша, тарих уkытыусыhы булып эшләй. Тимер Арыҫлан әҙәбиәткә

кешеләрҙең хеҙмәт батырлыkтары, уларҙың рухи үҫеүе, совет яугирҙарының патриотизмы хаkындағы шиғыр һәм поэмалары менән әҙәбиәтебеҙҙе байыта.Шағирҙың поэтик һәләте юмор һәм сатира өлкәһендә лә асыла.

Төпкилде ауылы егете Муса Сиражи ҙа шағир буларak танылa. Уның «Уралым мондарына», «Әй тандары», «өфөм минең – йырым минең» кеүек йырҙары күптәргә таныш. Муса Сиражи уkыусыларҙы хисләндерерлек шиғырҙар ижад итә, әҙәби тәнkит, тәржемә менән дә ихлас шөғөлләнә. Балалар әҙәбиәте өлкәһендә лә емешле эшләй. Шулай уk ул байтаk телевизион фильмдарға сценарий яҙған автор ҙа булып таныла.

Бөтә яҙыусылар ҙа әҙәбиәткә бер төрлө килмәйҙер. Мәҫәлән, Йәрмөхәмәт ауылынан Наил Ҡотдосов хеҙмәт юлын ауылда башлай. Башkорт ауыл хужалығы институтына инеп зоотехник факультетын бөтөрөп сыға, һуңынан аспирантурала уkый. Шул уk ваkытта унда әҙәбиәткә, ижадkа ынтылыш та көслө була. Ул бер-бер артлы «Ғәфү ит, әсәйем», «Егет һүҙе», «Олимп тауы текәме» һ.б. повестарҙы яҙа. Әҫәрҙәрендә ауылдағы үҙгәреш, яңыса йәшәү һәм эшләү өсөн киҫкен көрәш, ошо kатмарлы процесс менән етәкселек итеү проблемаларын күтәрә. Яҙыусының әҫәрҙәрендә күңелдәрҙе kуҙғатырҙай шифалы заман һулышы бар.

Ә Бикмәт ауылынан Әсғәт Мирзаһитов драматург булып таныла. Бер нисә йыл «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире булып эшләй, яҙыусылар союзында әҙәби консультант вазифаһын башkара. Ә.Мирзаһитов драмаларында оло ваkиғалар, етди характерҙар тыуҙырырға ынтыла. Уның заман тышауҙарынан азат булған, бөгөнгө уkыусыны һәм тамашасыны тулkынландырған әҫәрҙәре

байтаk.Ә.Атнабаев унының тураһында былай ти:«Ул башkорт драматургияһына тиçтәгә яkын тап Әсғәтсә яҙылған бик үҙенсәлекле сәхнә әçәрҙәре kалдырып китте. Улар заманында шаулап барҙы, хәҙер ҙә үҙ kиммәттәрен юғалтмаған». Ысынлап та,«Әсәләр көтәләр улдарын»,«Әсәйемдең сал сәстәре» әçәрҙәре кемдәрҙе генә тулkынландырмай ҙа, кемдәрҙе генә уйландырмай.

Ә. Мирзаһитовтың ауылдашы Суфиян Сафуанов – башkорт әҙәбиәт ғилеме һәм әҙәби тәнkит өлкәһендә билдәле ғалим. Ул әҙәбиәтебеҙҙе ил күләмендә танытыуға, унының гәүһәрҙәре менән төрлө милләт уkыусыһын таныштырыуға ынтыла. Әҙәбиәтебеҙҙә дуçлыk, туғанлыk бәйләнештәрен өйрәнә. 70-се йылдарҙа өфөлә сығарылған «Башkорт совет әҙәбиәте тарихы» китабын яҙыуҙа, Башkорт әҙәбиәте тарихы тигән күп томлыk хеҙмәтте доньяға сығарыуҙа kатнаша, А.Карнай,Ғ.Хәйри,Ә.Бикчәнтәев,Н.Нәжми һәм башkа башkорт әҙиптәре хаkында күләмле хеҙмәттәр яҙа.С.Суфиянов бөгөнгө көндә лә әҙәбиәтселәрҙең алғы сафында бара. Унының мәkәләләр һәм рецензиялары матбуғат биттәрендә сығып тора. Уларҙа һәр яңы әçәргә, заман талаптарын иçәпкә алып, төрлө яkлы һәм объектив баһа бирергә ынтыла.

Профессиональ яҙыусылар менән бер рәттән kалабыҙҙа төрлө һөнәр эйәләре лә ижад менән шөғөлләнә. Уларҙың күпселеге - ''Алтын башаk'' әҙәби берләшмәһе ағзалары. Был берләшмә үҙенең барлыkkа килеүенә 75 йыл тулыу айkанлы '' Kүңелдәр балkышы'' тигән йыйынтыk сығара.

Йыйынтыkта төрлө һөнәр кешеләре-уkытыусылар, йәмәғәт хеҙмәткәрҙәре,ветерандар үҙҙәренең ижад емештәрен халыkkа тәkдим

итәләр. Шулар араһында минең ауылдашым Аҙнағол ауылы уҙаманы Тимерйән Иҙрисов та бар. Ул- данлыҡлы спортсы, СССР-ҙың почетлы спорт мастеры, заманында СССР-ҙың йыйылма командаһы ағзаһы, абруйлы судья, актер, оҙон көйҙө башҡарыусы, өҫтәүенә шағир ҙа. «Был донъяға ғашиҡмын», «Шиғырҙарым — йөрәк серҙәре», «Ашыҡтырма яҙмыш», «Күҙгә мондар» шиғыр йыйынтыҡтарының авторы ул.

Туймазы ҡалаһында йәшәүсе 1998 йылда Бәләбәйҙә үткән «Илһам шишмәләре» төбәк-ара шиғриәт фестивале еңеүсеһе Гөлмирә Бикбулатованы күптәр беләләр.Бөгөнгө көндә ул 6-сы һанлы мәктәптә эшләй.Яңыраҡ «Сүмесле ай» исемле шиғырҙар йыйынтығын сығара.Тыуған яҡҡа һөйөү,атай-әсәйгә тәрән ихтирам,бөгөнгө ҡатын-ҡыҙ яҙмышы хаҡында уйланыуҙар сағылған йыйынтыҡҡа ингән шиғырҙарҙа.

Үҙенең халҡын, тыуған ерен данлаған Ғәлимйән Шайәхмәтовтың ижады үҙенсәлекле. Шағирҙың һәр әҫәрендә беҙҙең көндәр һулышы тойола, тыуған ер менән кешегә мөхәббәт, уларға тоғролоҡ - бына ҡайҙа шағирҙың ижади тамырҙары. Ул 9 китап авторы.

Тимәк, ижад менән шөғөлләнеүсе райондаштарыбыҙ, яҡташтарыбыҙ бихисап. Беҙҙең бәрәкәтле Туймазы ере тағын да башҡорт әҙәбиәте киңлектәрен яулай алырҙай әҙиптәр үҫтерер тигән өмөттәр күңелгә йылылыҡ бирә. Докладымды Тимер Арыҫлан һүҙҙәре менән тамамлағым килә:

Барлыҡ йыуанысым шиғырҙарҙа
Бар бәхетем халҡым телендә ,
Халҡым ҡалһа әгәр мин ҡалырмын

һүҙем йәшәр әле илемдә.

Эйе, бындай әҙиптәрҙе тыуҙырған, үҫтергән халҡым әле йәшәр.Ә уларҙың әҫәрҙәре киләсәк быуындарҙы рухландырыр.

.